*Рәмил ЙӘНБӘК*

# "Мин уттарға яктым үткәндәрзе..."

## Көҙҙәр етһә...

Көҙҙәр етеп, ергә ҡар һибелә,
Көҙ һалҡыны ҡура тындарҙы.
Һирпеп ташлап була өрпәк ҡарҙы,
Һелкеп ташлап булмай йылдарҙы.

Ҡояш һүрән, әммә ҡышҡа алыҫ,
Көҙгө көнгә була һылтанып.
Дөрөҫ һүҙгә мөмкин ҡылтайырға,
Бер ни ҡырып булмай ҡылтайып.

Юл тайғаҡта тура үтеп булмай,
Урап үтеү кәрәк ҡаяны.
Көтмә инде хәҙер тәүәккәллек,
Көтмә хәҙер үткер саялыҡ.

Түбәләге ҡарлы болот баҫып,
Ауырая бара аҙымдар.
Көҙ тынлығы тыя күңелдәрҙе, —
Ярһынып ҡал ғүмер яҙында.

## Кисә менән бөгөн араһында

Үкенестәр томаланып ҡалды
Ҡыҙыу үткән йылдар араһында.
Кире ҡайтыу мәңге мөмкин түгел,
Артҡа күпме боролоп ҡараһаң да.

Ҡыуаныстар, ҡомда алтын төҫлө,
Төҫһөҙләнде ҡайғы араһында.
Хыял-өмөттәрҙән нимә ҡалһын,
Яҙмыш гелән тырнап тараһын да.

Бәргеләнәм, диңгеҙ һыуҙарылай,
Кисә менән бөгөн араһында.
Алдағы көн, әйҙәп, ҡулын болғай —
Ынтылыш юҡ. Килмәй бараһым да.

## Наҙға сарсау

Бер аҙ ғына тын алайым әле,
Хәл йыяйым әле аҙ ғына.
Ғүмер юлым барлап ултырамын:
Етмәне шул миңә наҙ ғына.

Ҡайғы-хәсрәт күмгән саҡтар булды,
Тирә-яғым булды һаҙ ғына.
Йырып сыҡтым,
ҡайсаҡ йөҙөп сыҡтым —
Ә етмәне бары наҙ ғына.

Бәхет яуып, саптым ҡыуаныста,
Мәңге төҫлө ине яҙ ғына.
Шул мәлдә лә йәнем һулҡып
торҙо:
Етмәй ҡалды миңә наҙ ғына.

Артабанғы юлға ҡуҙғалғанда
Сабырлыҡтар алам аҙ ғына.
Йәндәремде әсеттерер инде
Көҫәп алалмаған наҙ ғына.

## Һин мәңгелек

Һин — емеше үткән системаның:
Бар булмышың тора алдашыуҙан;
Эш эшләмәй — хәрәмләшеүҙәрҙән,
Төкөрөк сәсеп, ярһып даулашыуҙан.

Эсең тулы этлек —
үҙең беләһең һин —
Этләшәһең әммә күрә тороп.
Һәм еңәһең ихлас, изгеләрҙе —
Берсә шашып, берсә ҡотороноп.

Эт булһаң да, бүреләрҙе күргәс,
Ҡойроғоңдо ҡайҙа ҡыҫтырырға
Бик тә сосһоң.
Оҫтарғанһың шыпа —
Ҡасан шымып, ҡасан ҡыҫҡырырға.

Һиндәйҙәргә, ахры, кәрәге юҡ
Бер ниндәй ҙә заман, системаның.
Һин — мәңгелек сире кешелектең,
Бығауыңдан һис юҡ ысҡынаһы.

## Ышанмаҫһың

Ышанмаҫһың, әйтһәм: берҙән-берем,
Ғүмерем буйы эҙләп тапҡаным.
Тоҡанмаҫһың, аҡылыңды юйып,
Емермәҫһең ҡанун ҡапҡаһын.

Күҙҙәремде быуып, йөрәгемә
Һала ҡалһаң өмөт ҡабаттан,
Осонмамын мин дә
әүәлгесә —
Аҙ булдымы йәнем ҡанатҡан?!

Төңөлгәнбеҙ хистән, ихласлыҡтан.
Ысынлыҡҡа күнгән аңыбыҙ.
Аяҙ күктә йондоҙ һанап булмаҫ,
Ҡайнар булмаҫ ҡышҡы таңыбыҙ.

Беҙ барғанбыҙ, иркәм, ике юлдан,
Ике яҙмыш ебе һуҙылған.
Ҙур Мөхәббәт тигән туҡталышты
Төрлө ваҡыттарҙа уҙылған.
Күктән, ахры, тәҡдир һыҙылған.

## Өтөр

Йәшәп ятҡан ҡанундарҙың
Үҙгәрмәгән өтөрө;
Белгәнде белгертмәй йәшәү —
Алданыуҙың бер төрө.

Белмәгәнгә тынысыраҡ:
Беләге һыҙламайҙыр.
Ялған һүҙҙән вайымһыҙҙың
Йөрәге ҡуҙланмайҙыр.

Ҡанундар өҫтә яҙыла,
Үтәлә түбәндәрҙә.

Өҫтөндәр ғәйепле булмай,
Ғәйеп ул — бүтәндәрҙә.

Беҙ ғәйепле нимәгәлер.
Өйрәнелгән ғәйепкә.
Гөнаһтарҙы йыуып бөтмәҫ
Изге ғөсөл ғәйеттә.

Йәшәп ятыр ҡанундары,
Үҙгәрмәҫ бер өтөрө.
Билдәһеҙ: ғәйеп нимәлә?
Билдәһеҙ — ни көтөрө.

* * *

Мин уттарға яҡтым үткәндәрҙе,
Көлөн һиптем таңғы елдәргә.
Үкенес йә һағыш булып улар
Хәтеремә кисен килгәндәр.

Ергә күмдем хәтирәләр гөлөн,
Ҡарҙар һибеп, боҙға ҡатырҙым.
Үҙем көттөм, умырзая булып,
Яҙын улар кире ҡайтарҙы.

Шыңшып ыҙалатҡас, ташҡа бәйләп,
Кисәгемде һалдым һыуҙарға.
Төн уҙыуға, күлдең һөлөгөләй,
Йәбешеп сыҡты таңғы уйҙарға.

Бөгөнгөнөң башы — кисәгелә,
Ташлап китеп булмай үткәнде.
Бөгөнгөмә ҡарап самалайым
Иртәгәлә нимә көткәнде.

## Көнөбөҙгә бер ҡараш



Йылдар һанын, көн иҫәбен оноттом.
Юлын быуып, хис шишмәһен ҡороттом.

Башҡаларҙың мәж килеүе — бер көлкө,
Мин дә шундай иҫәр булдым бер килке.

Яҙ шашмайым, күшекмәйем көҙ көнө.
Йәй ҙә, ҡыш та — йөрәк тормай елкенеп.

Донъя хәле кереп сыҡмай аңға ла.
Уй төйнәрҙәй бер әҙәм юҡ янда ла.

Йәшәү түгел, көн итмештер был хәлем.
Бик йыраҡта күренеп ҡала хәләлем.

Һеңгәҙәне минең быуын яҙмыштан —
Һатлыҡ менән ялғандан һәм яңылыштан.

Һис теләк юҡ хыялдарҙа осорға,
Ай-йондоҙҙо, киң йыһанды ҡосорға.

Сит капитан алып бара кәмәне.
Билдәләнгән юл, йүнәлеш — һәммәһе.

Күккә күскәс, үҙебеҙҙе йәлләрбеҙ:
Бығаулы ла, бер ҡатлы ла йәндәр беҙ.